

**Абдуллина Ильмира Мират ҡыҙы.**
**Өфө ҡалаһы Калинин районы**
**3-сө интернат-мәктәбенең**
**башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.**

# Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы Зәйнәб Биишеваның тормошо һәм ижады тураһында презентация



**Мин фәрештә түгел, кеше инем,**
**Ерҙә кеше булып йәшәнем.**
**Хаҡһыҙлыҡты күрһәм, ярып әйттем,**
**Йәшен булып ярһып йәшнәнем.**

Ә. Таһирова

# Оло юлға аяҡ баҫыу…

-Зәйнәб Биишева Башҡортостандың хәҙерге Күгәрсен районы Туйөмбәт ауылында1908 йылдың 2 ғинуарында, бөрйән ырыуылы ярлы крәҫтиән Абдулла ғаиләһендә тыуған. Ата-әсәһенән бик иртә етем ҡала.

-Зирәк ҡыҙ бәләкәй саҡтан белемгә ынтылып үҫә. Әммә тормош ауырлығы арҡаһында 4-се класты фәҡәт 1924 йылда ғына тамамлай. Мәктәп йылдарында ул шиғырҙар яҙа башлай.



*Зәйнәб Биишеваның Ырымбурҙағы Башҡорт педтехникумында уҡыған саҡта төшкән фотоһы.*

- Шул йылдың йәйендә Зәйнәб Абдулла ҡыҙы Ырымбур өлкәһенең Ташлы ауылына әҙерлек курсында, аҙаҡтан Ырымбурҙа Башҡорт педагогия техникумында уҡый. Уҡыу йылдарында ул әҙәбиәт менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башлай,техникумда сығарылған «Йәш быуын» журналына материалдар йыя, мәҡәләләр яҙа, онотолоп китеп китаптар уҡый.

- 1929-1931 йылдарҙа Зәйнәб Биишева Баймаҡ районы Темәс ауылында уҡытыусы булып эшләй.
- 1931 йылда Өфөлә уҡытыусыларҙың квалификацияһын камиллаштырыу курсын үткәндән һуң, Башҡортостан  китап нәшриәтенә эшкә ҡала.
- 1938- 1951 йылдарҙа – төрлө гәзиттәрҙә, комитеттарҙа эшләй.
- 1951 йылдан һуң Зәйнәб Абдулла ҡыҙы профессиональ яҙыусы.

# Ғаиләһе



*З.Биишева ғаиләһе менән.*

Зәйнәб Абдулла ҡыҙының ире Ғәзиз Әминев һуғышта ҡатнаша, орден-миҙалдар менән наградлана, ҡаты яралар  алып, икенсе төркөм инвалиды булып ҡайта. Зәйнәб апай байтаҡ йылдар ауырыу ирен, етем апаһын ҡарай, өс улын аяҡҡа баҫтыра. Бөгөн оло улы Тельман Әминев – химия фәндәре докторы, профессор, Рәсәй тәбиғәт фәндәре академияһында эшләй, уртансыһы Юлай– шулай уҡ ғалим, тәбиғәт фәндәре кандидаты, әсәһенең әҫәрҙәрен нәҡ ул руссаға тәржемә иткән. Кинйә улы, табип Дарвин, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, мәрхүм булып ҡалған.

# Ижады



*«Алла шаһит, уйҙарымдың сиге юк, кәләмемдең осо юк.”*

*З.Биишева*

Зәйнәб Биишева – оҙайлы ижад юлы үткән яҙыусы. «Гөрләүектәр араһында» исемле хикәйәһе «Октябрь» журналында 1930 йылда баҫылып сыға. Әҙәби ижадҡа ныҡлап Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ныҡлап тотона.1941-1942 йылдарҙа «Өс кис», «Партизан малай» исемле хикәйәләре донъя күрә. Унда үҫмерҙәрҙең һуғыш яландарында күрһәткән батырлыҡтары кәүҙәләндерелә.

Бөгөн Зәйнәб Биишеваны әҙәбиәттең бөтә жанрҙарында ла бына тигән әҫәрҙәр ижад иткән яҙыусы тип беләләр.












# Шиғриәт

Әҙибәнең тиҫтәләгән шиғыр һәм поэмаларын, «Гөлъямал» исемле шиғри повесын, «Салауаттың һуңғы монологы» поэмаһын халыҡ, әле булһа ла, яратып уҡый.

# *Йәшәү бәхете.*



Зәйнәб Биишеваға арналған һәйкәл – проекты.
Авторы - Стритович Д. А.

Йәшәү бәхете- күңел
сафлыҡта.
Йәшәү бәхете- дуҫлыҡ,
сафлыҡта.
Йәшәү бәхете- илең,
халҡың өсөн
Хеҙмәт аша тыуған
хаҡлыҡта.

З.Биишева

«… унының  шиғри әҫәрҙәрендә изгелеккә ынтылған йөрәктең таштан да ҡатыраҡ һәм көслөрәк икәнлеге данлана, сөнки ауыртыныуҙы, күтәрә алмаҫ ауырлыҡты тын-тауышһыҙ үткәрә алыу, шул уҡ ваҡытта изге һәм һиҙгер булып ҡалыу бары ысын кешеләргә генә хас.»

О.Вәлитов

# Зәйнәб Биишева - бигерәк тә проза өлкәһендә әүҙем эшләгән яҙыусы.

«Сәйер кеше», «Уйҙар, уйҙар», «Дуҫ булайыҡ», «Ҡайҙа һин, Гөлниса?» тигән повестарында яҙыусы йәштәр тормошоноң мөһим яҡтарын һүрәтләй.
Яҙыусы матбуғатта тәнҡит һәм публицистик мәҡәләләр, иҫтәлектәр менән дә йыш сығыш яһаны.

«Мөхәббәт һәм нәфрәт», «Һөнәрсе менән Өйрәнсек» тигән әҫәрҙәре яҙыусының хикәйәт жанры оҫтаһы булыуын да күрһәтте.



Башҡорт дәүләт академия һәм башҡа театрҙарҙа уның «Тылсымлы ҡурай», «Гөлбәҙәр», «Нәҙер» пьесалары буйынса спектакльдәр ҡуйылды, һәм тамашасылар тарафынан яратып ҡаралды. Үҙебеҙҙә тейешле баһаһын алмаһалар ҙа, ваҡыт барыбер ҙә бөтәһен үҙ урынына ҡуйҙы. Йылдар үткәс, Ижевск драма театры Бөтә Союз милли драматургия фестиваленә башҡорт яҙыусыһының «Нәҙер» әҫәре буйынса спектакль сәхнәләштереп фестиваль лауреаты исемен алды.

# “Ғүмер китабы”










«Ышанығыҙ миңә, «Кәмһетелгәндәр»ҙе уҡып, башҡорттарҙың революцияға тиклемге тормошо, көнкүреше, ауыҙ-тел ижады хаҡында һәр төрлө этнографик һәм тарихи әҙәбиәтте уҡығандан күберәк һәм тулыраҡ мәғлүмәт алдым»

П.Берков.

«Яҡтыға» трилогияһы – оҙайлы тынғыһыҙ ижад емеше: 1929 йылда, Билалда уҡытҡан сағында, яҙыла башлаған был эпик полотно 70-се йылдарҙа аяҡ баҫҡанда ғына тамамлана.

«Был әҫәрҙәрем… - минең тиҫтәләрсә йылдар күңелемдә һаҡлап килгән иң мөҡәддәс теләгем ине. Һәм мин… ошо изге теләккә ирештем»

З.Биишева



Ошо трилогияһының «Кәмһетелгәндәр», «Уяныу» романдары өсөн 1968 йылда уға Башҡорт АССР-ының Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы бирелде.

«Зәйнәб Биишеваның «Кәмһетелгәндәр» романы айырым китап булып сыҡҡанда, мин 4-се  класта уҡый инем. Был әҫәр өлкәндәргә генә түгел, беҙҙең йәштәге балалар өсөн дә бүләк булды. Ҡалын тышлы булһа ла, күп уҡыуҙан туҙып бөткән был китапты китапхананан бер нисә тапҡыр алып уҡый башлағас, әсәйем Өфөнән үҙемә алып ҡайтып бирҙе»

Г.Юнысова

# «Яҙыусының исемен мәңгеләштереү»




Өфөләге Коммунистик урамындағы З.Биишева йәшәгән йортта ҡуйылған мемориаль таҡташ



Сибай институты алдында әҙибәгә ҡуйылған бюст.



*Зәйнәб Биишеваның тыуған ере - Туйөмбәттә (Күгәрсен районы) асылған йорт-музейы*

# Зәйнәб Биишева исемен йөрөтә:

- Башҡортостан «Китап» нәшриәте дәүләт предприятиеһы,
- Өфөләге урам,
- Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия академияһы,
- Мораҡ ауылында дөйөм белем биреү мәктәбе,
- Күгәрсен районының әҙәби премияһы.

-Ҡатын-ҡыҙҙар араһынан беренсе булып «Башҡортостандың халыҡ яҙыусыһы» тигән оло исем алған шағир, драматург.
-Революция һәм граждандар һуғышы осоронда башҡорт халҡының тормошон асыҡ сағылдырған эпик романдар ижад итеүсе.
-Замандаштары тураһында повестар һәм хикәйәләр, балалар һәм үҫмерҙәр өсөн пьесалар һәм әкиәттәр авторы.
-Гоголь, Тургенев, Аксаков, Кассиль, рус һәм совет әҙәбиәтенең башҡа классиктарының әҫәрҙәрен башҡортсаға тәржемә итеүсе.
-Әҙибәнең Рәсәй һәм донъя халыҡтары телдәрендә алтмыштан ашыу китабы баҫылып сыҡҡан.

# Һәм ул – Зәйнәп Биишева.

1996 йылда әҙибәнең йөрәге тибеүҙән туҡтай…

# Оçтаның ҡулы ҡала,
# Шағирҙың һүҙе ҡала...



# Ҡулланылған әҙәбиәт исемлеге


1. Биишева З. Уҡытыусыға ярҙамға. Төҙ. Ф.Б. Юнысова – Өфө, 2007, 3-сө бит.
2. Биишева З. Монолог. Шиғырҙар. Поэмалар. – Өфө, 1986й.
3. Биишева З. Әҫәрҙәр, дүрт томда, том 2. Роман, повестәр, хикәйәттәр, хикәйәләр. – Өфө, 1981.
4. Вәлитов О. Башҡортостандың бөйөк ҡыҙы. //Ағиҙел/ 2008, №1-12-се бит.
5. Килмөхәмәтов Т.А. Әҙәбиәттең сағыу биҙәктәре. Ижади портреттар. – Өфө, 2005.
6. Ф.Әмирханова. Кеше күңеле диңгеҙ бит ул. // Башҡортостан уҡытыусыһы. 2001. №6
7. http://ukb.ucoz.ru/index/zajnab_biisheva/0-7ttp://sspa.edu.ru/2010-03-19-05-45-25/2010-04-09-06-00-15/139-2010-04-09-05-57-18
8. http://festival.1september.ru/articles/508555/